Зөһрә АЛТЫНБАЕВА

# Йырҙар бүләк итә халҡына



Йәшлек. Ҡанатлы, дәртле, дарманлы, сафлыҡ менән мөлдөрәмә тулы ғүмер мәле. Хоҙай тарафынан бүләк булған иң киткес гүзәл сәскә төҫлө ул, һис тә шиңмәҫ, һулымаҫ, һәр саҡ балҡып торор кеүек. Күптәр өсөн сикһеҙ дарьялай тойола. Әммә кеше ғүмеренең яҙҙары булғандай, йәйҙәре, көҙҙәре, ҡыш миҙгеле лә килеп етә. Йәшлек тә шулай һиҙҙермәй генә үтә. Күңелдәрҙе һыҙлатып, йырҙарҙа моңландырып уҙа ул.

*Аҡ болоттар йөҙә зәңгәр күктә,*<br>
*Их, шуларҙы тотоп алаһы.*<br>
*Йәш ғүмерҙәр бик тиҙ үтәләр шул,*<br>
*Йәш көйөнсә килә ҡалаһы...*

Ошо бәғерҙәрҙе өҙгөс йыры, илаһи моңо менән бихисап йыр һөйөүселәрҙе әсир иткән йырсы Радик Вәлмөхәмәтов ғүмер тигән изге бүләктең ҡәҙерен белергә, һәр миҙгелен баһалап йәшәргә саҡырған төҫлө.

Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, ”Урал моңо”, ”Дуҫлыҡ йыры”, ”Яҙғы моңдар”, ”Ирәндек моңдары” кеүек абруйлы бәйгеләр лауреаты Радик Вәлмөхәмәтов киң танылыу яулаған профессиональ йырсы. ”Сибай”, ”Уйыл”, ”Абдрахман”, ”Урал”, ”Ҡара ат”, ”Тәфтиләү”, ”Сәлимәкәй” кеүек илаһи халыҡ йырҙарын оҫта итеп, еренә еткереп, халыҡсан башҡарыу менән бер рәттән, эстрада өлкәһендә лә уңышлы эшләй ул. Уның башҡарыуында үҙенсәлекле һәм илһамлы яңғыраған ”Йәш ғүмерҙәр” (Зәлифә Ғилметдинова һүҙҙәре, Юлай Үҙәнбаев көйө) йырын кемдәр генә ятлап тыңламай икән. Репертуарында һәр саҡ бығаса ишетелмәгән өр-яңы йырҙары була уның һәм йырсы башҡарыу менән киң популярлыҡ яулай улар. Радик йырҙарға үтә талап-

сан, унының өсөн көйҙәрҙең күңелгә ятышлы булыуы менән бергә һүҙҙәренең мәғәнәле булыуы мөһим. ”Аҡсарлаҡ” (Буранбай Исҡужин һүҙҙәре, Юлай Үҙәнбаев көйө), ”Ҡәнәферҙәр” (Флүзә Мырҙабаева һүҙҙәре, Нәғим Нуриманов көйө), ”Тыуған көн” (Зөфәр Билалов көйө, Илфат Дәүләтшин һүҙҙәре), ”Әйҙә әле, йырлап үтәйек” (Илгиз Закиров көйө һәм һүҙҙәре) һәм башҡа йырҙар Вәлмөхәмәтов башҡарыуында халыҡ араһында киң танылыу алды, йәше лә, ҡарты ла яратып тыңлай уларҙы.

Радик Әбйәлил районы Ташбулат ауылында тыуып үҫкән. Йыр-моңға һәләте нәҫелдән киләлер.

— Беҙҙең туғандар араһында йырсылар байтаҡ, — тип хәтерләй Радик. — Өсәйемдең әсәһе — Сәлимә өләсәй бигерәк тә халыҡ йырҙарын оҫта башҡара ине. Һабантуйҙарҙа уны һорап йырлата торғайнылар. Әле лә иҫтә: ялтырап торған еҙ батмусын ала ла, бармаҡтары менән һуғып, ҡунаҡтарҙы бейетә ине. Өләсәйем эш араһында ла йырлап йөрөй торғайны. Ошо моңдар әле лә ҡолаҡта сыңлағандай, күңелгә һеңеп ҡалған улар.

Бәләкәйҙән йырсы булырға хыяллана Радик. Мәктәптә уҡығанда бөтә концерттарҙа ла әүҙем ҡатнаша, үҙ алдына гитарала уйнарға өйрәнә.

— Әле иҫкә төшһә, ҡыҙыҡ тойола, — тип йылмая Радик. — Гитарала рус көйҙәрен генә уйнай торғайным, йәнәһе, гитара беҙҙең башҡорт музыка ҡоралы түгел. Гармунда уйнарға ла теләк ҙур ине, әммә ниңәлер гармун алып бирмәнеләр, аҡса етмәгәндер, күрәһең. Былай, гармунды ҡулға алһам, тиҙ генә көй сығара торғайным. Гармуным булһа, бәлки, музыкант булып та китер инем.

Моңдар иле артабан да үҙенә әйҙәй Радикты — Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Тәүҙә Учалы филармонияһында, унан Башҡорт дәүләт филармонияһының Нефтекама филиалында эшләй. Тап ошо йылдарҙа үҙ йырҙарын, үҙ тамашасыһын таба йырсы. ”Һарына” төркөмөнөң төп йырсыһы булыу менән бергә, уға башҡорт төркөмөн етәкләү бурысы ла йөкмәтелә. Тырыш, эшһөйәр егет гастролдәргә йөрөргә лә, аудио-, видеокассеталар, компакт дисктар сығарырға ла өлгөрә. Ситтән тороп уҡып, Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор бүлеген тамамлай. Әйткәндәй, сәнғәт училищеһында Радик Әлфиә Мәсәлимова класында, институтта Айрат Ҡобағошовта белем ала.

Әлеге көндә Радик Башҡорт дәүләт филармонияһында үҙе етәкселек иткән төркөм менән матур йөкмәткеле тамашалар тәҡдим итә. Февраль айында Өфө тамашасыларын ҡыуандырһалар, март айында күрше төбәк — Һарытау өлкәһендә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙе моңло йырҙары менән шатландырып ҡайттылар. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән берлектә ойошторолған был күркәм сара бөтәһенең дә күңеленә хуш килде.

— Һарытау яҡтарында шундай ихлас башҡорт ҡәрҙәштәребеҙ йәшәүен күреп ҡыуанып бөтә алманым, — ти Радик. — Һәр сығышыбыҙҙы алҡышҡа күмеп ҡаршы алдылар. Тағы килегеҙ, тип үтенделәр. Һабантуйға ла саҡырыу ебәрҙеләр.



Артабан Радик Вәлмөхәмәтов етәкселек иткән төркөм апрель айында Сибай, Баймаҡ, Учалы, Белорет ҡалалары, Аҡъяр ҡасабаһында матур тамашалар тәҡдим итте.

— Яңы коллектив менән эшкә дәррәү тотондоҡ, — ти йырсы һәм етәксе Радик. — ”Гел моңланам, гел көләм...” тип аталған программабыҙҙа нәфис һүҙ оҫталары Юнир Салауатов, Салауат Ҡусҡаров, йырсы Рәфисә Әсәҙуллина, Илшат Ишморатов, Рәмил Хажиев, Гүзәл Хажиева, бейеүселәр Римма Бакирова, Сулпан Хөсәйеновалар ҡатнаша.

Әйткәндәй, коллектив ағзалары халыҡ йырҙарына ҙур иғтибар бирә.

— Һуңғы йылдарҙа урыҫ, сит ил эстрадаһына эйәреү көсәйҙе, — ти йырсы. — Түбән кимәлдәге йырҙар күбәйҙе. Ә халыҡ, айырыуса өлкән быуын моңло, аһәңле, мәғәнәле йырҙар көтә. Шуға ла үҙебеҙҙең программаға халыҡ йырҙарын күпләп индерҙек. Һәүәҫкәр композиторҙарҙың әҫәрҙәре лә ҙур урын ала, сөнки уларҙың ижады халыҡ күңеленә яҡын, халыҡсан, заман һулышын сағылдыра.

Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, ти халыҡ. Радик Вәлмөхәмәтов хаҡында был әйтем. Тырышҡанда ғына теләктәреңә, маҡсаттарыңа ирешеү мөмкинлегенә инанып йәшәй һәм ижад итә ул. Репертуарын тик күңеленә яткан йырҙарҙан ғына төҙөй йырсы. Әлбиттә, унда үҙе тәүләп өйрәнгән һәм сәнғәт училищеһына уҡырға ингәндә башҡарып, юғары баһа алған ”Һандуғас” төп урынды биләй. Артабан ”Сандыуҙәк”, ”Бейеш”, ”Йәмәлекәй тауы”, ”Сибай” кеүек — Радиктың моңло тауышына тап килеп торған йырҙар яңғырай.

Радиктың ҡустыһы Рушан да сәнғәт юлын һайлаған, ул, йәш булыуына ҡарамаҫтан, оҫта ҡурайсы. Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге ҡурайсылар бәйгеһендә — беренсе, Fата Сөләймәнов исемендәге конкурста өсөнсө урын яулаған, ”Яңы исемдәр” бәйгеһендә лә дипломант булған. Әлеге ваҡытта Рушан Биктимеров кәләше, талантлы йырсы Венера Рәхмәтуллина менән Башҡорт дәүләт филармонияһының ”Йәдкәр” төркөмөндә эшләйҙәр.

Әйткәндәй, Радик ”Йәдкәр” фольклор ансамбле менән уҙған йыл Төркиәнең Ялова ҡалаһында үткән фольклор бәйгеһендә ҡатнашты һәм донъяның 19 иленән килгән фольклор ансамблдәре араһында һыр бирмәне. Радиктың ижады хаҡында ”үҙе болот, ә йырҙары шифалы ямғыр кеүек”, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Уның йырҙары моңға һыуһаған күңелдәргә ғәжәйеп дауа төҫлө, йөрәктәргә илһам, дәрт өҫтәй.

Йырҙары кеүек, исеме лә сәнғәт донъяһында көндән-көн йышыраҡ ишетелә Радиктың. Киң диапазонлы йырсы булыуы халыҡ йырҙарын да, эстрада әҫәрҙәрен дә берҙәй уңышлы башҡарыуына бәйле. Йырсы һөнәренә, ижади эшмәкәрлеккә етди ҡарауы ла ошоға булышлыҡ итәләр. Йырлап ҡына ҡалмай, ул үҙе лә йырҙар ижад итә. Р.Йомағужина һүҙҙәренә яҙған бер-нисә йыры тамашасы күңеленә хуш килде.

Республикабыҙҙың йыр сәнғәте иленә саф һәм матур тауышы менән аяҡ баҫкан баҫалҡы һәм тырыш егет Радик Вәлмөхәмәтовтың киләсәге тағы ла өмөтлөрәк. ”Йәш ғүмерҙәр” йырын халыҡ йыры кимәленә күтәргән йырсы тамашасы күңелендә лайыҡлы урын алды, ошо йыр уны яңы бейеклектәргә үрләтте. Ә йыр, ысынлап та, һәлмәк, моңло, тәрән фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә булыуы менән күңелдәрҙе арбай. Был йыр аша йырсы Радик Вәлмөхәмәтов үҙенең хис-тойғоларын, уй-кисерештәрен сағылдыра төҫлө, уның башҡарыу оҫталығы ла күп яҡлы булып асыла. Кеше ғүмере хаҡында бит ул йыр. Кешегә бер генә бирелә ул һәм уны матур итеп йәшәү зарур. Ә ғүмер буйы халҡына йыр бүләк итеүсе кеше — изге йән. Радикка ла ғүмерең йырҙарыңдай — оҙон, йырҙарың — моңло булһын, гелән кешеләрҙе һөйөндөрөп, илһам өҫтәп йәшә, тип әйтке килә.

*Йәш ғүмерҙәр бик тиҙ үтәләр шул*
*Хәтирәләр генә ҡалдырып.*
*Ағарталар сикә сәскәйҙәрен,*
*Маңлайҙарға һырҙар ҡалдырып...*

Ижад шишмәң сылтырап аҡһын, башҡорт йыр сәнғәтендә ҡабыҙған йондоҙоңдо һүндермә, Радик, тиәһе килә талантлы йырсыға. Сөнки йырсылар бик күп. Әммә улар араһында үҙенә генә хас моңо, үҙе генә башҡарған матур йырҙары булғандар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ә халыҡ йырсыға талапсан, был урынлы ла. Йырсы йырҙарында халыҡ рухын, уның йәшәү рәүешен, булмышын, асылын сағылдыра. Шуға ла йыр йөрәктән урғылып сығырға һәм тамашасы, тыңлаусы йөрәгенә инеп ултырырға тейеш.

Радик ошо хәҡиҡәтте һәр саҡ иҫендә тота һәм сәхнә түренән халыҡ күңеленә тап ошондай йырҙарҙы ғына тәҡдим итә. Популяр йырсының өс компакт дискы, бер видеокассетаһы, өс аудиокассетаһы донъя күргән. Әле Радик өрәңы аудиокассета әҙерләй.



*Р.Вәлмөхәмәтов*
*ҡатыны Гүзәл һәм ҡыҙы Дилназ менән*